## ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ ПРЕДМЕТЫН ӨЙРӘНЕҮ ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

Дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) әҙәбиәтен өйрәнеү буйынса программа федераль дәүләт стандарттарында ҡуйылған талаптар һәм һөҙөмтәләр нигеҙендә төҙөлдө. Унда шулай уҡ дөйөм белем биреүҙең уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү һәм формалаштырыу программаһының төп идеялары һәм положениелары, дөйөм белем биреүҙең башланғыс белем биреү программалары менән күсәгилешлек принциптары күҙ уңында тотолдо.

### I. Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

1. Үҙ милләтен, Ватанын, тыуған яғын яратыу.
2. Этник һәм милли сағылышын таныу:

- үҙалыллыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау;
- мәктәп һәм кабинет йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡарау;
- һаулыҡты нығытырға һәм һаҡларға;
- атай- әсәйгә, тиҫтерҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға.

3. Ғаилә һәм йәмғиәт ҡиммәттәрен ихтирам итеү, үҙ аллы эшләү һәм үҙ эштәренә яуап бирергә әҙер булыу.
4. Ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем булыу һәм донъяны танып белергә ынтылыу.
5. Динамик үҙгәреүсән һәм үҫтерешле донъяла үҙенең социаль ролен аңлау.
6. Әхлаҡ, социаль ғәҙеллек һәм ирек хаҡындағы ҡараштар нигеҙендә үҙ аллы үҫешкә һәләтле булыу.
7. Һәр саҡ этик тойғолар, ихтирамлылыҡ, эмоциональ – әхлаҡ һәм икенсе кешеләрҙең тойғоларын уртаҡлаша алыу.
8. Сәләмәт булыу һәм төрлө шарттарҙан хәүефһеҙ сығыу ҡағиҙәләрен үтәү.

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

1. Уҡыу күнекмәләре нигеҙҙәрен белеү, үҙенең эшмәкәрлеген ойошторорға һәләтле булыу.
2. Уҡыу процессына яуаплы ҡарашлы булыу, маҡсат ҡуя,эште планлаштыра, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
3. Аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу.
4. Әңгәмәсенең фекерен тыңларға һәләтле булыу, тикшерелгән предметҡа ҡарата үҙенең нигеҙле ҡарашын әйтә белеү.

**Предмет һөҙөмтәләр:**

1. Телде милли үҙаң нигеҙе булараҡ аңлау.
2. Башҡорт теле Башҡортостандың, рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт һәм аралашыу теле булараҡ мәғәнәһен аңлау.
3. Дөйөм мәҙәниәт күрһәткесе, кешенең граждандлыҡ позицияһы булараҡ норматив телмәр һәм яҙма рус телен белеү.
4. Телмәр этикетына, аралашыуҙа төрлө тасуири тел сараларына эйә булыу.
5. Әҙәбиәтте милләт һәм халыҡ- ара мәҙәниәттең күрһәткесе булараҡ аңлау.
6. Уҡыуҙың төрлө төрҙәрен файҙаланыу: танышыу, өйрәнеү, һайлап, эҙләп, аңлы рәүештә ҡабул итеү һәм текстарҙың йөкмәткеһен аңлап, геройҙарҙың эшенә, ҡылығына әхлаҡи баһа биреү.
7. Танып белеү, ғәмәли, коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн телмәр бирәмектәре менән файҙалана белеү.

**5-9-сы кластарҙа башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүҙең шәхсән һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:**

- шәхестең рухи-әхлаҡ сифаттарын камиллаштырыу, күп милләтле Ватанға һөйөү тойғолары, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү;
- танып белеү һәм коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын файҙаланыу.

**5-9-сы кластарҙа башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүҙең предмет-ара һөҙөмтәләре түбәндәгеләрҙән тора:**

проблемаларҙы аңлай белеү, гипотеза ҡуйыу, материалдарҙы структураға һалыу, үҙ позицияһын иҫбатлау өсөн аргументтар һайлау, телдән йәки яҙма текстарҙа сәбәп эҙемтә бәйләнешен билдәләү, һығымталарҙы формалаштырыу;
эшмәкәрлекте үҙ аллы ойоштороу оҫталығы, уны баһалау, ҡыҙыҡһыныу сфераһын билдәләү;
төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләү күнекмәһенә эйә булыу, уны табыу, анализлау, үҙ эшмәкәрлегендә файҙаланыу.

**5-9-сы кластарҙа башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүҙең предмет һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:**

*танып белеү сфераһында:*

-башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтарҙың фольклорында, боронғо әҙәбиәт вәкилдәренең, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблеманы аңлау;
-художестволы әҫәрҙең яҙылыу дәүере менән бәйләнешен аңлау, унда сағылған ваҡыт, әхлаҡ сифаттары һәм уларҙың бөгөнгө көн яңырыуын асыҡлау;
-әҙәби әҫәрҙе анализлай белеү, теге йәки был әҫәрҙең ниндәй жанр төрөнә ҡарауын билдәләү, темаһын, идеяһын, әхлаҡ пафосын аңлау, уның геройҙарына характеристика биреү, бер йәки бер нисә әҫәрҙең геройҙарын сағыштырып ҡарау;

-әҫәрҙең сюжетын, композицияһын, тасуири һүрәтләү сараларын билдәләү, әҫәрҙең идея-йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен аңлау;
-әҙәби әҫәрҙе анализлағанда элементар әҙәби терминдар менән эш итә белеү;

*ҡиммәт-ориентация сфераһында:*
-башҡортәҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең рухи-әхлаҡи ҡиммәтәре менән таныштырыу, уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәтәре менән сағыштырыу;
-башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәренә ҡарата уҡыусыларҙың үҙ ҡараштарын булдырыу һәм уларҙы баһалау;
-өйрәнелгән әҙәби әҫәрҙәргә үҙ интерпретацияһын булдырыу;
автор позицияһын аңлау, уға ҡарата үҙ ҡарашын булдырыу;

*коммуникатив сферала:*
-төрлө жанрҙа яҙылған әҙәби әҫәрҙе аңлы итеп уҡыу һәм уларҙың йөкмәткеһен адекват ҡабул итеү;
-проза әҫәрҙәрен һәм уларҙың өлөштәрен текста ҡулланылған башҡорт теленең тасуири һүрәтләү сараларын һәм цитаиалар ҡулланып һөйләй белеү;
-тыңланған йәки уҡылған текст буйынса һорауҙарға яуап бирә белеү, телдән төрлө текстағы монолог телмәр төҙөү, диалог алып барыу оҫталығына эйә булыу;
-өйрәнелгән әҫәрҙең тематикаһы, проблематикаһы менән бәйле изложение, инша яҙыу, класта һәм өйҙә ижади эштәр, әҙәби һәм дөйөм мәҙәниәт темаларына рефераттар яҙыу;

*эстетик сферала:*
-һүҙ сәнғәте булараҡ әҙәбиәттең образлылыҡ тәбиғәтен аңлау;
-әҙәби әҫәрҙе эстетик ҡабул итеү, эстетик зауыҡ формалаштырыу;
-башҡорт һүҙҙәренең эстетик функцияһын, әҙәби әҫәрҙәрҙә художестволы образдар тыуҙырыуҙа тасуири һүрәтләү сараларының ролен аңлау.

## II Уҡыу предметының (курс) программаһы йөкмәткеһе

**<u>5-се класс</u>**

**Белем бар байлыҡтан да артыҡ**

**Мәжит Ғафури**. “Нурлы мәктәп”.

**Рәшит Ниғмәти.”** Хәйерле юл һеҙгә!”. Шиғырҙарҙа уҡыусыларҙың йәйге каникулын һәм уҡыуҙың тәүге көнөн тасуирлау.Уҡытыусы образы.Хеҙмәткә,уҡыуға мөхәббәт тәрбиәләү йәһәтенән шиғырҙарҙың әһәмиәте.

**Раил Байбулатов.** “Ағас һәйкәл”.Хикәйәлә малайҙарҙың дуҫлығы, бер-береһенә булған мөнәсәбәттәренең сағылышы.

**Ризаитдин Фәхретдинов.** “Белем” (“Нәсихәттәр”китабынан)

Шиғырҙа уҡытыусы образының бирелеше, тасуири-һүрәтләү саралары.

**Уҡытыусы – ул ҙур исем!**

**М.Кәрим.”Уҡытыусыма»**

**Н.Нәжми.** “Беренсе дәрес”. Шағирҙың ижадында,тормошонда тәүге уҡытыусыһының образы.

**Л.Яҡшыбаева.** “Бәхетең үҙең менән”. Әҫәрҙә уҡытыусы образы.

**Килеп етте көҙҙөң алтыны**

**Д.Юлтый**. “Көҙ”. Көҙгө тәбиғәт матурлығының сағылышы.

**А.Карнай.** “Урманда” Хикәйәлә көҙгө тәбиғәтте тасуирлау.Йөкмәткеһенең аллегорик характерҙа булыуы.Төп образдар.Тәбиғәтте тасуирларға өйрәтеүХикәйәнең йөкмәткеһе,образдары, художестволы үҙенсәлектәре.

**Ғ.Рамазанов.** “Ураҡ өҫтө”. Игенселәрҙе данлау

**Ф.Аҡбулатова.** “Атай икмәге”. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тылда ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм балаларҙың аяныслы яҙмыштарын, уларҙың хыялдарын һүрәтләү.Балалар образдарының бирелеше.

**Әҙәбиәт теорияһы**. Тасуирлау тураһында. Сағыштырыу тураһында. Хикәйә тураһында.

**Күңел күрке – тел**

**Ҡ.Аралбай.”**Башҡорт теле.” Туған телебеҙгә дәүләт теле статусы бирелеүе менән ғорурланыу,шатланыу тойғоларын һүрәтләү.

**Б.Бикбай.** “Туған тел”, “Рус теле”.Туған тел һәм рус теленең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәтен,матурлығын,байлығын данлау, телгә хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү,шиғыр теленең байлығы,образлылығы өҫтәндә күҙәтеүҙәр.Бөгөнгө көндә ике телдең дә дәүләт теле булыуы хаҡында мәғлүмәт биреү.

**Р.Ғарипов.** “Туған тел”. Туған телдең матурлығын,байлығын данлау, телгә хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү.

**Х.**Тапаҡов «Бибинур өләсәй»

**Уҡып барған һәр бер юлым, һәр бер һүҙем**

**Була минең юл күрһәтеүсе йондоҙом**

**М.Ғафури.** “Балалар һәм китап”. Китап уҡыуға өндәү

**Д.Бүләков.** “Яралы китап”.Бөйөк Ватан һуғышы осоронда халыҡтың берҙәмлеген,илдең азатлығын һаҡлау өсөн бөтә халыҡтың күтәрелеүен һүрәтләү.Һуғыштан һуң уҡыусыларҙың һуғышта ҡатнашыусыларҙы иҫкә төшөрөүҙәре.

**Я.Ҡолмой.** “Ҡыҙыҡлы китап”

**Н.Иҙелбай.** “Иң яҡын дуҫ” . Шиғырҙарҙа бала ғүмерендә китаптың роле,уның иң яҡын дуҫ булыуы, әһәмиәте һүрәтләнеүе. Балаларҙа китапты яратыу,уларға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Р.Фәхретдин** “Китап һәм уҡыу”.

**Халыҡ әйтһә - хаҡ әйтер…**

**Башҡорт халыҡ ижады.**

**Әкиәттәр.** “Алпамыша батыр”, “Әминбәк”, “Кәмән менән Сәмән,картуф сәсәкн Сәлмән”, “Айыу менән бал ҡорттары”. Халыҡ аҡылының һәм халыҡтың әхлаҡ ҡараштарының сағылышы. Әкиәттәрҙә хыял һәм ысынбарлыҡты, изгелекте һәм яуызлыҡты ҡапма-ҡаршы ҡуйыу. Ыңғай герой һәм уның дошмандары. Әкиәттәрҙең традицион үҙенсәлектәре.

**Йомаҡтар.Мәҡәлдәр**. Халыҡ тәжрибәһенең сағылышы. Образлы фекерҙәр.

**Башҡорт халыҡ йырҙары.** Башҡорт фольклорында йыр жанры. Оҙон һәм ҡыҫҡа көйлө йырҙар, таҡмаҡтар.

**Әҙәбиәт теорияһы**. Синоним һәм омонимдар. Антонимдар. Башҡорт халыҡ әкиәттәре. Әкиәт һөйләүселәр.

**Боронғонан аманат**

**С.Юлаев**. “Ҡайтып киләм”, “Яуҙа яраланғас”, “Йырҙарҙан”.

Азатлыҡ өсөн көрәш. Батырлыҡ,кешелеклелек темаһы.

**Ғәбдерәхим Усман.** “Егет булһаң”

“Ҡармасан менән Сәрмәсән”

**С.Яҡшығолов.** “Дим буйында яҙғы таң”. Туған тәбиғәт менән һоҡланыу.

**Я.Юмаев.** “Шәкерт”.

**Килеп етте ҡыштың һыуығы…**

**Н.Нәжми.** “Беренсе ҡар”.

**Г.Юнысова**. “Ҡотло булһын Яңы йыл”.

**С.Сурина.** “Ҡышты ҡаршылағанда”

**Х.Назар.** “Яуа ҡарҙар” Ҡышты тасуирлау. Ҡышҡы тәбиғәт менән һоҡланыу тойғолары тәрбиәләү.

**Башҡортостан – тыуған төйәгем**

**Р.Ғарипов.** “Башҡортостан”

**И.Кинйәбулатов.** “Дуҫлыҡ төйәге”

**М.Кәрим** “Өс таған”

**Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,**

**Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ**

**Р.Шәкүр.** “Урал батыр иле-сал Урал”. Шағирҙың Урал ерлеге менән һоҡланыуы, ғорурланыуы, сал Уралдың тарихи үткәнен тасуирлау, Урал батыр иленең данын һәм шанын һүрәтләү.

**Р.Ниғмәти.** “Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар”. Шағирҙың Ватан тураһында уйланыуҙары һәм балаға аңларлыҡ итеп һөйләүе, төп йөкмәткеһе,идея мәғәнәһе, төп образдары.

**А.Йәғәфәрова** “Урал иле”

**Изгеләрҙән-изге әсәйҙәр**

**К Кинйәбулатова** “Әсә күңеле”. Әсә күңеленең изгелеклелек һәм мәрхәмәтле булыуын тасуирлау.

**Х.Назар**. “Таҡта сәй”

**Ғ.Вәлиев.** “Әсәйем фатихаһы”

**Яҙ килә, яҙ!**

**Р.Назаров.** “Яҙ башы.

**Д.Бүләков.** “Яҙғы ташҡын менән килгән бәхет”

**Ш.Бикҡол.“**Яҙғы уйҙар”

**Әҙәбиәт теорияһы**. Эпитет тураһында.

**Бер кем дә, бер нәмә лә онотолмай**

**Р.Ниғмәти.”**Еңеүселәргә дан!”

**Й.Мостафин.** “Ыласын”. Бөйөк Ватан һуғышында батырлыҡ күрһәткән яугирҙарға ихтирам тәрбиәләү.

**М.Кәрим**.”Билдәһеҙ һалдат”.

**Т.Ғиниәтуллин.** “Миҙал”. Хикәйәлә һуғыш ветеранының халыҡ тарафынан нисек иғтибарға мохтаж булыуын күрһәтеү.

**Әҙәбиәт теорияһы**. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү.

**Тәбиғәт донъяһында**

**Р.Ғарипов** “Ҡабантурғай”.

А.**Карнай.”**Турғай”

**З.Хисмәтуллин.** “Урман ҡунағы”. Олатай һәм уның ейәненең тәбиғәткә мөнәсәбәте.

**Т.Йосопов.** “Ерән ҡашҡа”. Йәйге урман тәбиғәтен,йәнлектәрҙе,хайуандарҙы һүрәтләү.

**С.Агиш.** “Турыҡай”. Хикәйәлә Турыҡайҙың батырлығы, үҙенең өйөрөн һаҡлау өсөн бүреләр менән алышҡа инеүен һүрәтләү.

**Йәмле йәй килде**

**К.Кинйәбулатова.** “Барыһы ла тыуған еремдә”.

**Ф.Иҫәнғолов.** “Хәмит күпер”. Әҫәрҙә хеҙмәт темаһының сағылышы.

**А.Игебаев.** “Ҡыу буйында балыҡсы”

**М.Әбсәләмов.** “Йомағужа тирәктәре”

**Әҙәбиәт теорияһы.** Характеристика тураһында.

**Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте**

**М.Йәлил.** “Йырҙарым”. Шағирҙың тормош юлы һәм ижады. Шиғырҙарының яҙмышы ,концентрацион лагерҙа яҙылғаны тураһында.

**Дәрдмәнд.** “Нурый менән Зәйнәб”. Әхлаҡ ҡағиҙәләренең бирелеше.

**С.Моҡанов.** “Минең республикам.” Шағирҙың үҙенең тыуған республикаһын данлауы, уның менән ғорурланыуы.

**Сиреклек контроль эш**

## <u>6-сы класс</u>

**Алтын һуҡмаҡ**

Ф.Ғөбәйҙуллина. “Башҡортостан флагы”. С.Әлибаев.“Мәктәп юлы”. Я.Вәлиев. “Беренсе көн” Я.Ҡолмой.Мәктәп. Р.Фәхретдин.Мәктәп.

**Уйҙың күрке-тел,телдең күрке – һүҙ**

З. Биишева. Башҡорт теле. Туған телдең матурлығын, нәфислеген, яғымлылығын данлау. Ҡ.Аралбаев “Башҡорт ҡоролтайына”. Р.Бикбаев “Халҡыма хат” поэмаһынан өҙөк

**Ил ҡеүәте – икмәктә.**

Г.Юнысова “Ер улына ”,Д. Бүләков “Ҡара икмәк”. Ф.Чанышева “Икмәк еҫе”. Ә. Вахитов “Өс бөртөк бойҙай” хикәйәһе.

**Халыҡ һүҙен ташлама.**

“Урал батыр” әкиәте. Батырҙар тураһында әкиәттәр. “Ҡариҙел”. Легенда тураһында. Бәйеттәр. Таҡмаҡтар.

**Уҡытыусы! Ошо исемдән дә юғарыраҡ ниндәй исем бар!**

К.Кинйәбулатова “Уҡытыусым” Л.Яҡшыбаева “Уҡытыусы – ул белем биреүсе лә, икенсе әсәй ҙә…” Р.Шаммас “Уҡытыусыға”. Ф.Иҫәнғолов “Уҡытыусы Ғүмәров”.

**Беҙҙең боронғо әҙәбиәтебеҙ.**

Яҙма ҡомартҡыларыбыҙ. Ҡол Ғәли. “Йософтоң матурлығы”. Табын ҡәбиләһенең Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһе. Сәйф Сараи. Парсалар.

**Ата-олатайҙарҙың да төйәге**

Т.Йосопов “Ай Уралым, Уралым”. Н. Иҙелбай “Салауат ташы”. Жәлил Кейекбаев “Урал тураһында ҡобайыр.”

**Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек, Салауаттай батыр юҡ икән...**

Салауат Юлаев шиғырҙары. “Юлай менән Салауат” (эпостан өҙөк) М.Иҙелбаев. “Төш”. Образ тураһында төшөнсә. Рәми Ғарипов “Салауат батыр”.

**Башҡортостан – Гөлбостан…**

Ш.Бабич “Башҡортостан” шиғыры. Ялыҡ Бурнаҡ улы. З.Биишева “Башҡортостан”. Н.Нәжми “Башҡортостан”.

**Һыҙҙырт, ҡурай, башҡорт моңдарын.**

Ҡурай (башҡорт халыҡ йыры). Нур Ғәлимов “Яуҙан ҡайтҡан ҡурай”. Ҡ.Аралбай “Йомабай ҡурайы”.

**Әсәй күңеле – тулы ҡояш**.

А.Игебаев “Әсәйемә”. Йыһат Солтанов “Ҡәнәфер сәскәһе”. Р.Ғарипов “Әсәм ҡулдары”. Бер әсәнең зарыҡҡаны (башҡорт халыҡ әкиәте)

**Яуҙа еңеп ҡайтығыҙ!**

Шайморатов генерал (йыр). Ә.Бикчәнтәев “Бөркөт һауала үлә”. Т.Килмөхәмәтов “Турайғыр”хикәйәһе.

**Тәбиғәт донъяһында.**

Г.Юнысова “Талы бөгөлөп тора”. Ф.Ғөбәйҙуллина “Умырзая”хикәйә. А.Игебаев “Сыйырсығым”.

Р.Назаров. “Офоҡтағы ҡояш”. Сәлмән Яҡупов “Ҡарабаш турғай”.

**Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте**

Ғабдулла Туҡай “Шүрәле” әҫәре. Виталий Бианки “Ҡоторған тейен”. Ибраһим Йосопов “Ҡара бүрек хаҡында һүҙ”шиғыры.

**Сиреклек контроль эш**

**7-се класс**

**М. Ямалетдинов. “Көрәш, кеше!”, Ғ.Дәүләди. “Ҡоролтайға барам”**

Шиғырҙарҙа йәмғиәтте яңыртып ҡороу, торғонлоҡтан ҡотолоу өсөн көрәшкә саҡырыу идеяһы. Ҡоролтайҙа халҡыбыҙҙың азатлыҡ. Яҡтылыҡ көрәше традицияларына таяныу, халыҡты берләштереү, йәмғиәтте яңылыҡ, шәфҡәтлелек, гуманлыҡ өсөн яңы көрәшкә өндәү.

**И. Бураҡаев “Башҡорт көсө”**

Әҫәрҙә сағылдырылған осор. Башҡорт ғәскәрҙәренең Сыңғыҙхан ғәскәре менән көрәше. Дошман ҡулына эләккән башҡорт яугирҙарының рухи ныҡлығын, ғәҙеллеккә, туканлыҡҡа. Берҙәмлеккә тоғролоғон тасуирлау. Образдарға характеристика.

**Ғ.Хөсәйенов “Ете ырыу”,”Алдар батыр ҡиссаһы”**

Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙәрҙә тарихҡа аңлатма биреү, халыҡтың тормош-көнкүрешен, социаль һәм милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшен һүрәтләү. Аҡһаҡалдар, ил батырҙары, Алдар батыр образын һүрәтләү. Кире образдар.

Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Уларҙың тематик бүленеше, оҡшаш һәм айырма яктары. Ер-һыу, ырыу-ҡәбилә тарихы: «Етегән йондоҙ», «Ай менән Зөһрә». Ырым-ышаныу: «Сыңрау торна». Тарихи риүәйәттәр: «Бошман ҡыпсаҡ батыр». Тормош-көнкүреш риүәйәте: «Ғилмияза»

**Б.Рафиҡов “Эйәрләнгән ат**

Әҫәрҙә сағылдырылған осор. Тарихи фараздың жанр үҙенсәлектәре. Рогервик крепосы тотҡондарының тормошо. Образдарға характеристика**.**

**Я.Хамматов “Төньяҡ амурҙары”**

Яҙыусының тормош юлы. Романда башҡорттарҙың XIX быуат башындағы тормошон һүрәтләү. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт ғәскәрҙәре күрһәткән батырлыҡтар. Кутузов, Ҡаһым түрә, Буранбай образдары.

**Синыфтан тыш укыу-.”Мәзин йортонда”**

**Йырҙар, риүәйәттәр**

Йыр тураһында төшөнсә. Боронғо һәм хәҙерге йырҙар. Оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙар. Йырҙарҙа көй һәм моңдоң әһәмиәте. Тематикаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың төркөмдәргә бүленеше. Халыҡтың рухи тормошонда

йырҙың роле. Тарихи һәм лирик йырҙар. Тарихи йырҙар («Эскадрон», «Урал»). Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһында («Йәйләүек»). Ҡасҡындар тураһында («Буранбай», «Бейеш»). Кантон башлыҡтары тураһында («Тәфтиләү», «Ҡолой кантон»). Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһында («Зөлхизә», «Ғилмияза»).

**Сеңләүҙәр**

Сеңләүҙәрҙең туй йолаһы менән бәйле булыуы, уларҙа элекке башҡорт ҡатын-ҡыҙының ауыр яҙмышы сағылышы. Ижтимағи шарттар үҙгәреү менән сеңләү жанрының да бөтөүе. Сеңләүҙәрҙең әһәмиәте.

**С.Юлаев**

Тормош юлы. 1773-1774 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Салауаттың тотҡан урыны. Шағир-импровизатор. Шиғырҙары. Салауат образы әҙәбиәттә, сәнғәттә.

**Әҙәбиәт теорияһы-.**Импровизация һәм импровизатор. Һүрәтләү саралары. Метафора.

“**Йәнтүрә “ хикәйәһе**

1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары күрһәткән батырлыҡтар. Йәнтүрә. Аҫылбикә образдары. Уларҙың батырлыҡ. Ҡыйыулыҡ сифаттары.

**Акмулла** Тормош юлы. Ижадында мәғрифәтселек идеялары,мораль –этик проблемалар.

**М.Ғафури** . Яҙыусының биографияһы. Шиғырҙарҙа хеҙмәткә дан йырлау, хеҙмәт кешеләренең генә маҡтауға лайыҡлы булыуҙарын күрһәтеү. Шиғырҙарҙың тәрбиәүи әһәмиәте.

**Әҙәбиәт теорияһы.** Шиғыр төҙөлөшө тураһында. Ритм. Рифма. Строфа.

**Ш.Бабич-**

Тормош юлы. Ҡурай образы аша башҡорт халҡының данлы үткәнен сағылдырыу.

**Синыфтан тыш укыу** Р.Бикбайҙың Ш.Бабич тураһындағы монографияһы.

**Д.Юлтый- “Тимеркәй фәлсәфәһе”**

Яҙыусының тормош юлы. Ябай кешенең фажиғәле яҙмышын. Эске донъяһын, уй-кисерештәрен сағылдырыу. Тимеркәй образы. Сәмси образы.Ауыл байы Ҡотлояр образында кешелекһеҙлек һыҙаттары.

**Әҙәбиәт теорирой тураһында төшөнсә**

**Һ.Дәүләтшина**-Яҙыусының тормош юлы. «Айбикә» повесы (өҙөк). Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда азатлыҡ өсөн көрәштең, ҡатын-ҡыҙҙың рухи үҫешенең һүрәтләнеше. Ауыл кешеһе йәшәйешенең сағылышы. Образдарға характеристика.

**Әҙәбиәт теорияһы-.** Портрет. Повесть. Юмор һәм сатира.

**Р.Ниғмәти-**“Йәмле Ағиҙел буйында” поэмаһында Ағиҙел образы. Поэманың художестволы үҙенсәлектәре.

**Синыфтан тыш укыу-**Ә.Лотфуллин тураһында әңгәмә

**М. Кәрим-** Тормош юлы. ”Айгөл иле”драмаһының йөкмәткеһе,темаһы. Идеяһы. Драмалағы образдар. Художестволы үҙенсәлектәре.

**Әҙәбиәт теорияһы-**Драма тураһында төшөнсә.Сюжет элементтары.

**Р.Өмөтбаев**”Атлы башҡорт” әҫәрендә Ватан һуғышы ваҡиғаларын, яугирҙар һәм ат образын һүрәтләү.

**Синыфтан тыш укыу**

**Т.ү”Минең яраткан геройым”**

**Әҙәбиәттән бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

## 8-се класс

**Ә. Моратов**., **Р. Бикбаев**

Шиғырҙарҙа халыҡ характерына хас ыңғай сифаттарҙы сағылдырыу, халыҡты йәмғиәтте яңыртыуға. Демократик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороуға, был көрәштә берҙәмлеккә саҡырыу идеяһы.

**Ҡобайырҙар**

Ҡобайырҙарҙа XVI – XVIII быуаттарҙағы ваҡиғаларҙың сағылышы. Халыҡты хандарға , бейҙәргә ҡаршы көрәшкә өндәү идеяһы. Ҡобайырҙарҙың поэтик үҙенсәлектәре.

Әҙәбиәт теорияһы. Ҡобайыр тураһында төшөнсә. Жанр үҙенсәлеге, шиғыр төҙөлөшө. Әйтеш тураһында.

**Шафиҡ Әминев- Тамъяни**

“Урал “, “Башҡорт бабаларының тарихы” шиғырҙары.

**Мөхәммәт пәйғәмбәр.** “Ҡөрьән китабы”

**Р. Бикбаев** «Хәҙистәр», **М. Ямалетдинов** «Ҡөрьән сүрәләре» -

**Ғ. Ибраһимов**

“Кинйә” романына өҙөк. Романда сағылдырылғаносор,социаль- тарихи шарттар, халыҡ тормошо һөм көрәшенең сағылышы.

**Б.Бикбай**

Яҙыусының ҡыҫҡаса биографияһы. “Ер” поэмаһында халыҡтың үҙ азатлығы өсөнбыуаттар буйы алып барған көрәшен һөм азатлыҡ яулауын һүрәтләү. Лирик герой образы. Поэманың художестволы үҙенсәлектәре.

“Ҡаһым түрә” драмаһында башҡорт халҡының 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуын кәүҙәләндереү. Рус халҡы менән башҡорт халҡы араһындағы дуҫлыҡты сағылдырыу.

**Ғ. Сәләм**

Ғ.Сәләмдең биографияһы. “Шоңҡар” поэмаһының темаһы,идеяһы, йөкмәткеһе.Төп образдар. Композиция үҙенсәлектәре.

Әҙәбиәт теорияһы. Поэтик синтаксис тураһында төшөнсә.

**З. Биишева**

“Һөнәрсе менән Өйрәнсек” әҫәренең идея- тематик йөкмәткеһе.

**М.Кәрим**

М.Кәримдең биографияһы.”«Үлмәҫбай” поэмаһы. Башҡорт яугирҙарының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы батырлыҡтарын кәүҙәләндереү.

”Алыҫ юлға эйәрләйҙәр”, “Йәшәйһе бар” шиғырҙарында кеше ғәмере,йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйланыуҙар.

Әҙәбиәт теорияһы. Лиро-эпик поэмаларының үҙенсәлектәре.

**Н.Мусин**

“Йыртҡыс тиреһе” романынан өҙөк.

Әҫәрҙә Һолтанбайҙың ауыр яҙмышы. Йәмғиәттә хөкөм һөргән шәхес культы осоро эҙемтәләрен, заманыбыҙҙың законһыҙлыҡ, шәфҡәтһеҙлек күренештәрен, фажиғәһен тасуирлау

**Р. Ғарипов**

“Урал йөрәге”, “Аманат”,”Уйҙарым”

Шағирҙың биографияһы. Заманһулышы менән һуғарылған “Һүҙем бар””Урал йөрәге” шиғырында тыуған Башҡортостан, унык тарихын, бөгөнгөһөн һүрәтләү.

“Кеше ғүмере” шиғырында кешенең оло йәнлелеген, кешелеклелеген, рухи матурлығын сағылдырыу, гуманлыҡҡа саҡырыу.

**Ғ. Хөсәйенов**

“Һуңғы тарпан” хикәйәте. Хикәйәттә ҡырағай аттар – тарпандарҙың ҡырып бөтөрөлөүен күрһәтеү. Кейек-хайуандарға, аттарға рәхимле булырға, уларҙы һаҡларға өндәү.

Әҙәбиәт теорияһы. Әйләнмә композицион сара.

**Р. Бикбаев**

”Башҡортостан бында башлана”, ”Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”, ”Дауыл”. “Барып етһен ине хаттарым”, “Йәншишмәбеһ ошо тупраҡта” шиғырҙарында тыуған ергә мөхәббәт, уның именлеге,тәбиғәтте һаҡлау проблемалары.

**Т. Ғиниәтуллин**

“Мәтрүшкә еҫе”, “Әсә һәм бала” әҫәрҙәре.Әҫәрҙә ябай кешеләрҙең күңел күркәмлеген, эске донъяһының сафлығын күрһәтеү. Хәбибулла образы.

“Әсә һәм бала” хикәйәһендә әсә менән бала араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырыу. Әҫәрҙең йөкмәткеһе, образдары.

**Н.Нәжми**

“Башҡортостан”, “Аҡ шишмә”Тыуған Ер – әсәгә һөйөү тойғоһон сағылдырыу. Лирик герой образы.

**Ҡ.Аралбаев**

“Беҙ – кеше” ( поэманан өҙөк)

**Ф.Туғыҙбаева**

“Аҡмулла”, “Ҡыңғырау”

**Ә.Әминев**

“Ҡытай-город”Әҫәрҙең йөкмәткеһе, төп образдары.

**Р.Камал**

“Таня-Таңһылыу”. Әҫәрҙән өҙөк. Йөкмәткеһе, образдары, шәфҡәтлелеккә саҡырыу

**Х.Назар**

“Башҡортостан – минең баш йортом”, “Аҡҡа табыныу!, “Дауа”. Шиғырҙарҙа ил, телде, башҡорт йырын данлау, изгелеккә, күңел сафлығына саҡырыу.

Поэмала бөгөнгө көндә бөтәбеҙҙе лә уйландырған, борсоған мәсьәләләр: тәбиғәт бысраныуы, ер-һыу ағыуланыуы, ил, тел яҙмышы хаҡындағы ҡараштарҙың сағылышы.

## 9-сы класс

**Инеш**

Мәҙәниәт системаһында әҙәбиәт. Художестволы әҙәбиәт һәм фән. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы.

**Халыҡ ижады**

Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Халыҡ ижады һәм яҙма әҙәбиәт. Башҡорт халыҡ ижады. Уның традицион жанрҙары.

**Башҡорт халыҡ эпосы йәки ҡобайырҙар.**

**“Урал батыр” эпосы**. Унының боронғолоғо,мифологик нигеҙе. Төп идеяһы – халыҡ бәхете хаҡында тәбиғәттең стихиялы көстәренә ҡаршыы көрәште данлау. Урал һәм Шүлгән образдары. Ҡобайырҙың художестволы үҙенсәлектәре.

“**Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы.** Тарих һәм халыҡ эпосы. Иҙеүкәй образы. Эпоста күтәрелгән философик, педагогик һәм әхлаҡ-этик проблемалар.

**Боронғонан алып XVIII быуат аҙағына тиклемге башҡорт әҙәбиәте –Боронғо әҙәбиәт.**боронғо төркиҙәр һәм уртаҡ төрки әҙәбиәт. М.Ҡашғари һүҙлеге. Ундағы йыр, дастан, мәҡәл үрнәктәре. Боронғо әҙәби әҫәрҙәрҙең «Ҡиссаи Йософ» , “Буҙйегет” поэмалары.

**Урта быуат әҙәби ҡомарткылары**. Ҡотб, Сәйеф Сараи, Хәрәзми, Хисам Кәтиб дастандары. Уларҙың идея-тематик йөкмәткеһе, тел-стиль үҙенсәлектәре.

XVIII быуатта Башҡортостанда азатлыҡ өсөн көрәш һәм уның ауыҙ- тел, яҙма әҙәбиәттә сағылышы. Батыршаның батшаға яҙған хаты.

**Йырауҙар һәм сәсәндәр ижады**

Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған йырауҙар. Ҡобағош сәсән, Ҡарас сәсән, Ерәнсә сәсән, Байыҡ сәсән, Буранбай-Йәркәй сәсән, Ишмөхәмәт сәсән, Ғәбит сәсән. Уларҙың тормошо һәм ижады.

**Салауат Юлаев**

Яугир - шағирҙың тормошо һәм яҙмышы. Салауат – яугир, шағир, сәсән. Шиғырҙарының тематикаһы һәм проблематикаһы. Тыуған ил, тәбиғәт, мөхәббәт, азатлыҡ һәм батырлыҡ тураһындағы шиғырҙары. Тарихи шәхес, әҙәби герой, тарихи ваҡиға һәм художестволы әҫәр тураһында төшөнсә.

**Т.Ялсығол – әл- Башҡорди**

Тормошо. Сәйәхәттәре. Мәҙәни һәм әҙәби эшмәкәрлеге.

**Ғәбдрәхим Усман**

Тормош юлы. Башҡортостандағы ғүмере. Эшмәкәрлеге.

**19-сы быуат әҙәбиәте**

**М.Аҡмулла**

Тормошо һәм ижад юлы. Мәғрифәтсе. Ижадында халыҡ педагогикаһының сағылышы. Шиғыр оҫтаһы. Аҡмулла образы әҙәбиәттә һәм сәнғәттә.

**М.Өмөтбаев**

М.Өмөтбаевтың ғилми-ағартыу, тарих, этнография, фольклор, тәржемә өлкәһендәге эшмәкәрлеге.

**Р.Фәхретдинов**

Тормошо, дини эшмәкәрлеге. Журналист. Мәғрифәтсе . Тарихсы. “Сәлимә”, “Әсмә” әҫәрҙәре.

**20-се быуат башында әҙәбиәт**

Башҡортостанда милли әҙәбиәттең тыуыуы. Мәғрифәтселек реализмынан тәнҡитле реализмға күсеү.

**Сафуан Яҡшығолов**

Яҙыусының тормош юлы һәм ижады.

**Ф. Сөләйманов**

Тормош юлы. Әҙәби ижады. Әҙәби-ғилми ижадының халыҡ-ара әһәмиәте.

**Мәжит Ғафури**

Яҙыусының тормош юлы һәм ижады. Шиғриәте. Проза әҫәрҙәре.

**Ш.Бабич**

Шағирҙың тормош һәм ижад юлы тураһында белешмә. Башҡортостан, азатлыҡ өсөн көрәш, тәбиғәт, мөхәббәт темаһы. Романтик. Сатирик.Шиғыр оҫтаһы. Башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урыны.

## III. Тематик план

| Бүлектәр (сәғәт) | Класс (сәғәт) | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | **5** | **6** | **7** | **8** | **9** |
| Башҡорт халыҡ ижады. | 10 | 10 | 10 | 8 | 8 |
| Боронғонан алып XVIII быуат аҙағына тиклемге башҡорт әҙәбиәте. | 3 | 8 | 2 | 3 | 4 |
| XIX быуат әҙәбиәте. | 2 | | 3 | | 14 |
| XXбыуат башында әҙәбиәт. | 3 | | 6 | | 16 |
| Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы. | 1 | | 3 | | |
| Утыҙынсы йылдар әҙәбиәта. | | | 3 | | |
| Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт әҙәбиәте. | 4 | 1 | 3 | 9 | |
| Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте. | 6 | 5 | | 4 | |
| Хәҙерге әҙәбиәт. | 24 | 34 | 28 | 39 | 19 |
| Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте. | 5 | 5 | | | |
| Әҙәбиәт теорияһы һәм тарихы буйынса мәғлүмәттәр. | 5 | | 5 | | |
| Әҙәби белем кимәлен диагностикалау, ағымдағы һәм йомғаҡлау контроле. | 2 | 2 | 2 | 2 | 2 |
| Кластан тыш уҡыу. | 5 | 5 | 5 | 5 | 5 |
| **Бөтәһе** | **70** | **70** | **70** | **70** | **68** |